*Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,*
*Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының*
*Закондар сығарыу Палатаһы депутаты*

# ҠАЛА БАШҠОРТ МӘКТӘПТӘРЕНДӘ БАШҠОРТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУҘЫ ОЙОШТОРОУ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Билдәле булыуынса, тамамланыуға табан барған XX быуатта ла халҡыбыҙ сәйәсәт һәм иҡтисад менән бәйле ижтимағи һәм рухи фажиғәләргә юлыҡты, күп юғалтыуҙар кисерҙе һәм, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, милли деградация билгеләре әле булһа ла күҙгә ташланып тора. Шуға күрә зыялыларыбыҙ башҡорт халҡын һәм уның телен һаҡлап алып ҡалыуҙы бөйөк ҙур маҡсат рәүешендә ҡабул итә. Ошо йәһәттән ҡала мөхитендә тыуып үҫкән мәктәпкәсә йәштәге һәм мәктәп йәшендәге балаларға башҡорт телен өйрәтеү һәм уҡытыу, ғөмүмән алғанда, башҡорт телендә уҡытыу һәм тәрбиә биреү мәсьәләһен төптән уйлап хәл итеү зарур.

Беҙҙең педагогтар башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙы күп осраҡта дидактика йәиһә методика проблемаһы итеп ҡарарға өйрәнгән. Ҡала мөхитендәге мәктәптә был мәсьәләгә тар педагогик күҙлектән генә ҡарау бигерәк тә дөрөҫ булмаҫ ине, сөнки мәктәпкә тиклем туған телендә иркен һөйләшә алмаған балаларға тел өйрәтеүҙе тик дәрестәр аша, ҡалыплашҡан методика алымдарын ҡулланып ҡына теүәл башҡарып сығыу мөмкин түгел. Әле тикшерелгән проблеманы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына ғына тапшырып ҡуймайынса, башҡорт мәктәбенең дөйөм проблемаһы, уның эшенең төп йүнәлеше итеп ҡарау кәрәктер. Башҡорт мәктәбендә милли рухлы шәхес тәрбиәләү — төп стратегик маҡсат булһа, тел үҙе — милли тәрбиә сараһы, ә уҡытыу объекты ғына түгел. Милләт тарихын, уның борондан килгән ауыҙ-тел ижадын, йыр-моңдарын, сәнғәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәтеү бала аңында үҙ телендә милли аралашыу һәм милли фекерләүҙең бәҫен күтәрә. Рух тәрбиәһе тел тәрбиәһе менән ҡуша башҡарылған хәлдә, балаларыбыҙҙа халҡыбыҙҙың рухи асылына хас психологик сифаттарҙы тәрбиәләй алырбыҙ, уларҙың милли аңын һәм үҙаңын үҫтерә алырбыҙ. Башҡалабыҙҙың 136-сы лицейында был ҡараштың дөрөҫлөгөнә үҙ тәжрибәбеҙҙә инандыҡ.

Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу процесында төп ғәмәли маҡсаттарҙың беренсеһе — уҡыусыны туған телендә ирекле һәм иркен һөйләшә алыу кимәленә еткереү булһа, икенсеһе — уның үҙенең уй-фекерҙәрен мөмкин тиклем аныҡ һәм образлы итеп, грамматика закондарына ярашлы яҙма телгә күсерә белеүе. Ҡала мәктәбендә был маҡсаттарға беҙ тулыһынса ирешә алманыҡ әле.

Уйлауымса, беҙҙең ҡала мәктәбендә башҡорт телен уҡытҡанда уның грамматикаһын өйрәтеүгә саманан тыш ваҡыт сарыф ителәә, шул уҡ ваҡытта һөйләмгә грамматик анализды бик оҫта эшләп тә, башҡортса фекер туплап, телдең бөтә нескәлектәрен ҡулланып һөйләй-яҙа алмаған уҡыусылар ҙа байтаҡ. Әлбиттә, был уҡыусылар юғары уҡыу йорттарына ингәндә башҡорт теленән тестарҙы бик һәйбәт тапшыралар, ләкин быйның менән генә тулыһынса ҡәнәғәтләнеп булмай.

Әйткәндәй, ҡала мәктәбендә башҡорт телен уҡытҡанда сит телдәрҙе уҡытыуҙа ҡулланылған алымдарҙы файҙаланыу зыян итмәҫ ине. Ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙ мәктәпте тамамлап сыҡҡан саҡта ла башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеп еткерә алмайҙар, йә булмаһа ҡылымдың үткән заман формаларын дөрөҫ ҡулланмайҙар, һөйләм төҙөлөшөн бутайҙар һ.б. Сит телде уҡытҡанда аудирование кеүек эш төрөнә күп иғтибар бирелә, ҡысҡырып уҡыу, һөйләү, диалогҡа ҡоролған дәрестәр башҡорт телен түбән синыфтарҙа уҡытҡанда ғына күберәк ҡулланыла. Француз педагогы С.Френе француз телен уҡытыуҙа уҡыусыларҙан ирекле ижади текстар төҙөтөү һәм

яҙҙырыу алымын киң ҡулланып һәйбәт уңыштарға ирешкән, һәр уҡыусы аҙнаһына кәмендә ике текст яҙған. Ә беҙҙә йыш ҡына күсереп яҙыу кеүек күнегеүҙәр уҡыусының теңкәһенә тейеп бөтһә лә, төп урынды биләй.

Башҡорт мөхитендә үҫкән ауыл балаһы ла, ҡала башҡорто балаһы ла туған телен бер үк уҡытыу методикаһы буйынса, бер үк уҡыу әсбаптарын ҡулланып өйрәнә. Иғтибар итәйек: һөйләү телмәре ярайһы уҡ үҫешкән ауыл балаһы ошо нигеҙҙә яҙма телде үҙләштереү аша хәҙерге заман башҡорт әҙәби телен өйрәнһә, ҡала балаһының туған телде өйрәнеүе башлыса уны башҡортса уҡырға, яҙырға өйрәтеүҙән, башҡорт теле грамматикаһын, башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу аша уның уҡыу-яҙыу күнекмәләрен үҫтереүҙән ғибәрәт. Был осраҡта ҡала балаһының фекерләү, аралашыу, һөйләү теленә иғтибары гел икенсе планда ҡала килә. Һәр хәлдә, ҡала уҡыусыһының һүҙ запасы ауылдыҡынан күпкә ҡайтыш, уның башҡорт телендә фекерләүе урыҫса фекерләүҙең параллеле кеүек килеп сыға: урыҫ теленең грамматик төҙөлөшө, был телде уҡыусы һәйбәтерәк белгәнлектән, башҡорт телендә фекерләүгә ҡамасаулыҡ итеүсе көслө психологик барьер булып тора.

Мәсәғүт педучилищеһында уҡыған саҡтағы һабаҡташым әҙәбиәт дәресендә ниндәйҙер бер хикәйәне һөйләгәндә уҡытыусыбыҙ ул ҡулланған өс тиҫтәләп ерле һөйләш һүҙҙәрен яҙып алғайны. Ҡала балаһы ерле һөйләштәрҙе белмәй тиерлек, ул турана-тура яҙма әҙәби телде өйрәнә.

Әйтелгәндәр ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуға ҡарата ижади ҡараш кәрәк икәнлеген тағы ла нығыраҡ иҫбатлай.

Психолог булараҡ, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытҡанда балаларҙа ыңғай уҡыу мотивацияһын булдырыу тураһында әйтмәйенсә китә алмайым. Ҡала мәктәптәрендә уҡыусы балалар өсөн был үтә мөһим, сөнки улар тел үҙләштереү осоронда байтаҡ ауырлыҡтар кисерә. Уҡыусыларҙа тел өйрәнеүгә ҡарата яңы теләк-ихтыяждар тыуҙырған ыңғай тәьҫир итеү саралары мөмкин тиклем күберәк файҙаланырға кәрәк. Ябай итеп әйткәндә, уҡыусыны, хаталары күп булған хәлдә лә, түпәләмәйенсә өйрәтеү мөһим.